*Әхмәр АҘНАБАЕВ,*
*БДПУ-ның башҡорт теле кафедраһы мөдире,*
*профессор*

# Билдәлелек-билдәһеҙлек категорияһы һәм сингармонизм — башҡорт теленең грамматик төҙөлөшөн билдәләүсе күренештәр

Башҡорт телендә бер үк грамматик аффикстың фонетик варианттары күп һәм төрлө кимәлдә булырға мөмкин. Әйтәйек, хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының үткән заманында 20 төрлө аффикс ҡулланыла: *ат-ты — кит-те, ал-ды — кил-де, ҡаҙ-ҙы — иҙ-ҙе, аша-ны — эшлә-не; тот-то — көт-тө, һон-до — көл-дө, боҙ-ҙо — йөҙ-ҙө, оло-но — йөрө-нө, ат-ҡан — кит-кән, ал-ған — кил-гән.* Күренеүенсә, был ҡылымдың шаһитлы (билдәле) төрөндә 16 аффикс, шаһитһыҙ төрөндә 4 төрлө аффикс бар (*-ҡан/-кән, -ған/-гән*).

Исемдәрҙең билдәле төшөм һәм эйәлек килештәрендә лә 16 төрлө аффикс ҡулланыла: *ат-ты — эт-те, урман-ды — тейен-де, ҡаҙ-ҙы — эҙ-ҙе, бала-ны — энә-не; ҡош-то — төш-тө, он-до — йөн-дө, боҙ-ҙо — күҙ-ҙө, һоло-но — өкө-нө* (эйәлек килештең ялғауҙарын күрһәтеп тормайбыҙ).

Ә ҡайһы бер аффикстарҙың варианттары күп түгел. Мәҫәлән, күплек аффиксының 8 варианты ғына бар: *ат-тар — эт-тәр, он-дар — өн-дәр, ҡаҙ-ҙар — эҙ-ҙәр, бала-лар — бәлә-ләр.* Исемдәрҙән ҡылым яһаусы ялғауҙарҙың ике варианты ғына була: *аҡ-ла — эш-лә, тоҙ-ла — өҙ-лә* һ.б. Дөрөҫ, көнсығыш (Ҡыуаҡан) диалекттың һөйләштәрендә уларҙың һаны күберәк: *аҡ-та — эш-тә, тоҙ-ҙа — эҙ-ҙә, аң-да — өн-дә* һ.б. Әммә һуңғы аффикс төрҙәре әҙәби телгә алынмаған.

Ни өсөн бер аффикстың фонетик варианттары күп, икенселәренеке әҙерәк була? Әйтәйек, билдәле төшөм килештең аффикстары 16 төргә барып етә икән, уларҙың шулай күп булыуына башҡорт теленең ниндәй үҙенсәлектәре (билдәләре, закондары) йоғонто яһай? Беҙҙең күҙәтеүҙәребеҙ буйынса, беренсенән, теге йәки был аффикстың варианттары күп булыуына сингармонизм күренеше, уның айырым төрҙәре (аңҡау гармонияһы, ирен гармонияһы, ассимиляция) туранан-тура йоғонто яһай

(йәки төп сәбәпсе була, тип әйтергә мөмкин). Миҫалдарға яҡынан иғтибар итәйек*: ат-ты — эт-те, урман-ды — тейен-де* һ.б. Күренеүенсә, бер үк аффикстың ҡалын һәм нәҙек варианттары барлыҡҡа килеүенә аңҡау гармонияһы туранан-тура йоғонто яһаған. Шулай итеп, аңҡау гармонияһының йоғонтоһо арҡаһында бер үк ялғауҙың ҡалын һәм нәҙек варианттары барлыҡҡа килә. Ә төшөм килештең *-ды/-де, -ҙы/-ҙе, -ны/-не* ялғауҙарының барлыҡҡа килеүенә ассимиляция күренеше сәбәпсе була*: урман-ды, ҡаҙ-ҙы, бала-ны*. Ассимиляция күренеше *урман-ты, ҡаҙ-ды, бала-ды* формалары яһалыуға ҡаршы сыға, йәғни сонор өн *(н)* янында һаңғырау тартынҡы өн *(т)* килә алмай; *ҡаҙ-ҙы* һүҙендә тамыры аҙағындағы *ҙ* өнө аффикстың да *ҙ* өнө менән башланыуын талап итә (тулы ассимиляция). Шул уҡ төшөм килеш аффикстарының иренләшкән (ирен өндәре менән килгән) төрҙәре лә бар: *ҡош-то — төш-тө, он-до — йөн-дө, боҙ-ҙо — көҙ-ҙө, оло-но — бөрө-нө* һ.б. Бындай иренләшкән аффикстарҙың булыуына сингармонизм законының бөр төрө — ирен гармонияһы туранан-тура йоғонто яһаған, йәғни һүҙҙең тамырында иренләшкән *о/ө* өндәре килгәс, улар ялғауҙарҙа ла һаҡлана. Шулай итеп, эйәлек һәм төшөм килеш аффикстарының 16-шар фонетик варианты бар. Ә ни өсөн сығанаҡ һәм урын килеш аффикстарының фонетик варианттары нәҡ ике мәртәбәгә кәмерәк, йәғни һәр береһенең 8-әр варианты ғына бар: *ат-тан — эт-тән, ялан-дан — кәбән-дән, ҡаҙ-ҙан — эҙ-ҙән, бала-нан — бәлә-нән; ялан-да — кәбән-дә, ҡаҙ-ҙа — эҙ-ҙә, бала-ла — бәлә-лә*. Сөнки был килеш аффикстарының иренләшкән варианттары юҡ, телдә барлыҡҡа килмәй, йәғни *ҡош-тон — ҡош-то, болон-дон — болон-до* (урын килеш) рәүешендәге килеш формалары барлыҡҡа килмәй, тимәк, ирен гармонияһы был аффикстарҙа һакланмай, ”боҙола”. Ни өсөн? Был һорауға ла профессор Ж.Ғ.Кейекбаевтың билдәлелек-билдәһеҙлек теорияһына таянып, уны файҙаланып яуап биреп була. Мәктәп дәреслектәрендә килештәрҙе ике төркөмгә бүлеп бирәләр: грамматик килештәргә (эйәлек һәм төшөм килештәр) һәм пространство килештәренә (төбәү, сығанаҡ һәм урын килештәр). Был бүленеш осраҡлы ғына түгел: дәреслек авторҙары пространство килештәренең билдәһеҙлек төшөнсәһе менән бәйләнгәнен һиҙгәндәр. Ысынлап та, *урманға киттеләр, урманда булдылар, урмандан ҡайттылар* әйтемдәрендә *урманға, урманда, урмандан* һүҙҙәре үҙҙәренең эске тәбиғәте менән билдәһеҙлек мәғәнәһен белдерә: ҡайҙа ул урман — бер саҡрым алыҫлыҡтамы, мең саҡрымдамы? Тимәк, эйәлек һәм төшөм килештәр килештәрҙең билдәле төрҙәре (грамматик килештәр) булһа, төбәү, сығанаҡ, урын килештәр билдәһеҙ килештәргә инә (пространство килештәре). Шуға күрә лә һуңғы килештәрҙең аффикстары составында фәҡәт киң һуҙынҡылар ғына килә ала, хатта ирен гармонияһы ла һаҡланмай, ”боҙола”: *болондо — болондоң* — ләкин *болонға, болондан, болонда* (көтөлгән *болонғо, болондон, болондо* (урын килеш формаһы) барлыҡҡа килмәгән). Шуға ла сығанаҡ һәм урын килеш аффикстарының фонетик варианттары, эйәлек һәм төшөм килеш аффикстарына ҡарағанда, нәҡ ике мәртәбәгә кәмерәк. Ә төбәү килеш аффиксының фонетик варианттары тағы ла әҙерәк: *ат-ҡа — эт-кә, урман-ға — көн-гә, ҡаҙ-ға — көҙ-гә, бала-ға — бәлә-гә*, йәғни төбәү

килеш аффикстарының дүрт варианты ғына бар: *-ҡа/-кә, -ға/-гә*, сөнки сонор яңғырау тартынҡыларға һәм һуҙынҡыларға бөткән һүҙҙәрҙең бөтәһенә лә *-ға/-гә* аффиксы ҡушыла.

Күплек аффиксының фонетик варианттарында ла ирен гармонияһы һаҡланмай, "боҙола", йәғни күплек аффиксының иренләшкән варианттары барлыҡҡа килмәгән, фәҡәт *кош-тар — төш-тәр, он-дар — өн-дәр, боҙ-ҙар — йөҙ-ҙәр, оло-лар — өкө-ләр* рәүешендәге иренләшмәгән варианттары ғына яһалған. Ни өсөн? Был һорауға Ж.Ғ.Кейекбаевтың билдәлелек-билдәһеҙлек теорияһы яуап бирә: был теория буйынса бөтә урал-алтай телдәрендә киң һуҙынҡылар (башҡорт телендә *а-ә* һуҙынҡылары, ҡайһы бер телдәрҙә киң һуҙынҡыларҙың һаны күберәк булырға мөмкин) бик борондан уҡ билдәһеҙлек-күплек мәғәнәһен, ә тар һуҙынҡылар (башҡорт телендә ҡалған һуҙынҡылар: *ы-е, о-ө, у-ү, и*) билдәлелек мәғәнәһен белдереү өсөн ҡулайлашҡан булғандар. Киң һәм тар һуҙынҡыларҙың был үҙенсәлеген (әһәмиәтен, функцияһын) профессор Ж.Ғ.Кейекбаев үҙенең хеҙмәттәрендә бер нисә мәртәбә һыҙыҡ өҫтөнә алып әйтеп киткән: "...широкие гласные звуки *а-э* (асылда *ә* өнө. — **Ә.А.**) на исходе слова придавали предмету (имени) значение неопределенности. Поэтому эти широкие гласные заменялись узкими в тех случаях, когда была необходимость придать имени значение определенности, так как узкие гласные связаны с определенностью"[1]. Шул уҡ фекерен Ж.Ғ.Кейекбаев хеҙмәтенең икенсе бер битендә лә ҡабатлай: "...в личных местоимениях урало-алтайских языков идея множественности-неопределенности грамматически выражается путем замены узких передних гласных широким или задним гласным"[2]. Үҙ фекерен нығытыу өсөн, ул догур теленең факттарын килтерә: был телдә *би — мин* тигәнде аңлата, ә алмаштың күплеге *ба* (оҙон һуҙынҡы әйтелә) рәүешендә яһала. 3-сө заты: *ин* (*ул*) — *ан* (*улар*), йәғни алмаштарҙың берлегендә — *тар* һуҙынҡы (и һуҙынҡыһы), күплегендә киң һуҙынҡы (*а* һуҙынҡыһы) ҡулланыла, сөнки уларҙың берлеге билдәлерәк (мин, ул), ә күплеге билдәһеҙ мәғәнәһе менән бәйләнгән (беҙ, улар). Башҡорт һәм татар телдәрендә лә 3-сө зат алмаштарында догур телендәге хәлде (йәки оҡшаш хәлде) күрәбеҙ: *ул* — әммә күплегендә *алар* (башҡорт телендә — йәнле халыҡ телендә, татар телендә — әҙәби норма). Тимәк, башҡорт һәм татар телдәрендә лә догур телендәге кеүек 3-сө зат алмаштың берлеге *ул*, күплеге *ал* рәүешендә булырға тейеш, тик тора-бара *ал* формаһы үҙенең күплек мәғәнәһен юғалтҡан. Был күренеште, йәғни теге йәки был һүҙ өлөшөнөң, бигерәк тә аффикстарҙың үҙ мәғәнәләрен юғалта, юя башлауын күренекле тюрколог Г.Ф.Благова плеоназм тип атаған: "...плеоназм возникает на основе полного стирания первоначального грамматического значения устаревшего аффикса и вытекающего отсюда переразложения основы"[3]. Плеоназм күренешен Ж.Ғ.Кейекбаев та таныған һәм уның төрки телдәрҙең тарихи үҫешендә ҙур роль уйнауын билдәләп үткән: "...в тюркских языках первичный аффикс множественного числа *л*, некогда присоединившийся к именам на глагольную основу, постепенно утратил значение множественного числа. Поэтому к основе на *л* наращи-

вался показатель неопределенности *а(ә)* по общей модели, в результате чего образовался аффикс множественного числа *-ла/-лә*, который сохранил значение множественного числа в именах только в карачаево-балкарском и в глагольных формах в киргизском языках, например, карач.-балк.: къонакъ-ла ”гости”, арба-ла ”телеги, арбы”...”[4] Был цитатанан күренеүенсә, Жәлил Ғиниәтович, плеоназм күренешен танып, уның күплек аффикстарының тарихи үҫешендә уйнаған ролен күрһәткән. Тора-бара төрки телдәрҙә яңы барлыҡҡа килгән *-ла/-лә* күплек аффиксы ла үҙенең күплек мәғәнәһен юя, юғалта башлаған, шуға күрә, уның күплек мәғәнәһен һаҡлау өсөн, уға тағы бер боронғо дөйөм алтай күплек күрһәткесе *р* килеп өҫтәлгән: ”в других тюркских языках к аффиксу *-ла/-лэ(лә)* наращивался древний показатель множественного *р*, который в тунгусских языках присоединяется только к именам на *н*, например, эвенк., эвен.: орон ”олень” и оро-р ”олени”[5]. Башҡорт теленең дә боронғо бер дәүерендә — *-ла/-лә* күплек аффиксы ҡулланылған булырға тейеш, сөнки ҡайһы бер топонимик атамаларҙа ул нығынып ҡалған. Ғафури районында *Оҙон ҡырла* атамалы тау бар (*ҡыр-ла*). Профессор Ж.Ғ.Кейекбаев та үҙенең ”Туғандар һәм таныштар” исемле романында *Ташбатҡан ҡырлаһы* тигән терминды ҡулланған.

Шулай итеп, төрки телдәрҙә плеоназм күренеше бар. Ул хәҙерге башҡорт телендә лә күҙәтелә: *береһе, ҡайһыһы* һүҙҙәрендә бер үк мәғәнәле икешәр аффикс ҡулланылған — *бер-е-һе* һүҙендә ике эйәлек заты аффиксы бар: беренсеһе — *е* тартынҡы өндәргә тамамланған һүҙҙәргә ҡушыла (*эт-е*), икенсеһе һуҙынҡыларға бөткән һүҙҙәрҙә килә (*кәзә-һе*). Икенсе эйәлек заты аффиксының ҡушылыуы беренсеһенең мәғәнәһе юйыла башлауы менән аңлатыла ла инде. Татар диалектологы Л.Т.Мәхмүтова Минзәлә татарҙарының телендә эйәлек заты ялғауҙарының йышыраҡ ҡабатланыуын күргән: *әйбересе бар, итәгесе белән* (*әйбер-е-се, итәг-е-се*) рәүешле һөйләү был һөйләштә ғәҙәти хәл икән[6]. Шулай итеп, башҡорт һәм татар телдәрендә ҡасандыр *ал* алмашы 3-сө заттың күплеген белдергән булырға тейеш (догур телендә *ан* алмашы бөгөн дә ошо функцияла ҡулланыла), әммә уның күплек мәғәнәһе юйыла башлағас (плеоназм күренеше), уның күплек мәғәнәһен һаҡлау өсөн, күплек-билдәһеҙлек күрһәткесе (киң һуҙынҡы — *а*) килеп ҡушылған, һөҙөмтәлә *-ла* рәүешендәге күплек күрһәткесе барлыҡҡа килгән (уның хаҡында алда һүҙ булды). Тора-бара *-ла(-лә)* аффиксы ла төрки телдәрҙең күбеһендә үҙенең күплек мәғәнәһен юғалта башлаған, шуға ла уға боронғо дөйөм алтай күплек күрһәткесе *р* (эвен, эвенки телдәрендә ул бөгөн дә һаҡланған) килеп өҫтәлгән, шулай итеп бөгөнгө ҡатмарлы аффикс барлыҡҡа килгән. Күплек аффиксының иренләшкән варианты юҡ, йәғни *кош-тор — төш-төр, болон-дор — көн-дөр, боҙ-ҙор — көҙ-ҙөр, һоло-лор — бөрө-лөр* варианттары барлыҡҡа килмәгән, сөнки билдәлелек-билдәһеҙлек теорияһы буйынса күплек мәғәнәһен киң һуҙынҡылар ғына *(а-ә)* бирә ала: *кош-тар — төш-тәр* һ.б.

Алдағы биттәрҙә әйтелеүенсә, үткән заман хәбәр ҡылымдың шаһитлы (билдәле) төрөнөң дә 16 төрлө аффиксы бар. Был аффикстың күп вариантлы булыуына шул ук сингармонизм күренеше (уның айырым

төрҙәре) һәм билдәлелек-билдәһеҙлек категорияһы туранан-тура йоғонто яһаған: *ат-ты — кит-те, ал-ды — кил-де, kаҙ-ҙы — иҙ-ҙе, аша-ны — эшлә-не* — был аффикстарҙың барлыҡҡа килеүенә, беренсенән, аңҡау гармонияһы, икенсенән, ассимиляция, өсөнсөнән, билдәлелек-билдәһеҙлек категорияһы (уларҙың составында тар һуҙынҡылар ғына ы/е(э) һуҙынҡылары — килгән, шуға ла ҡылымдың билдәле (шаһитлы) төрө барлыҡҡа килгән). Был аффикстың иренләшкән варианттары ла бар: *тот-то, һон-до, боҙ-ҙо, оло-но — көт-тө, көл-дө, йөҙ-ҙө, йөрө-нө* — уларҙың барлыҡҡа килеүенә шул уҡ аңҡау гармонияһы, ирен гармонияһы, ассимиляция һәм билдәлелек-билдәһеҙлек категорияһы төп сәбәпсе булған.

Ә үткән заман хәбәр ҡылымдың шаһитһыҙ (билдәһеҙ) төрөндә 4 төрлө генә (вариантлы) аффикс барлыҡҡа килгән: *ат-kан — кит-кән, ал-ҙан — кил-гән, тот-kан — көт-кән, боҙ-ҙан — йөҙ-гән, оло-ҙан — йөрө-гән*, тимәк, *-kан/-кән, -ҙан/-гән* варианттары ғына бар, сөнки был аффикстарҙың иренләшкән варианттары барлыҡҡа килмәй: *тот-kон — көт-көн, боҙ-ҙон — йөҙ-гөн* варианттары юҡ, сөнки, һуңғы иренләшкән варианттар булһа, йәғни аффикстарҙа тар һуҙынҡылар (*о, ө* һуҙынҡылары) килһә, ҡылымдарҙың билдәһеҙ (шаһитһыҙ) төрҙәре барлыҡҡа килмәҫ ине, ә телгә шаһитһыҙ (билдәһеҙ) ҡылым формалары ла кәрәк.

Билдәлелек-билдәһеҙлек категорияһы һан төркөмсәләренең аффикстары яһалышына ла йоғонто яһаған. Мәҫәлән, бүлем һандары аффикстарында ла ирен гармонияһы боҙола, һаҡланмай: *өс-әр, йөҙ-әр* (көтөлгән *өс-өр, йөҙ-өр* формалары барлыҡҡа килмәй), сөнки бүлем һандары ла һандарҙың үҙенсәлекле билдәһеҙ төрө һанала: *синыфта өсәр дәфтәр тараттылар* (күпме дәфтәр таратылған, билдәһеҙ ҡала). ”По своему значению разделительные числительные выражают идею множественности числительных. Так, например, форма типа *он-ар//ун-ар* ”по десять” обозначает не только десять, а подразумевает несколько десятков...”, — тип күрһәткән Ж.Ғ.Кейекбаев[7]. Йыйнау һандарының (*бер-әү, ик-әү, өс-әү, дүрт-әү, биш-әү, алт-ау, ет-әү, ун-ау*) аффикстарында ла билдәлелек-билдәһеҙлек категорияһының йоғонтоһон күрәбеҙ. Был һандар ҙа үҙҙәренең тәбиғәте менән билдәһеҙлек-күплек мәғәнәһе менән бәйләнгән. Уларҙың был үҙенсәлегенә Ж.Ғ.Кейекбаев та күрһәткән: ”По своему значению собирательные числительные обозначают концентрацию отдельных, раздробленных единиц в одно целое или совокупность предметов; они как бы являются формой множественного числа имен числительных”[8]. Ә күплек-билдәһеҙлек мәғәнәһе киң һуҙынҡылар ҡатнашлығында ғына яһала, шуға күрә йыйнау һандарының аффиксы составында мотлаҡ киң һуҙынҡылар ҡатнаша*: бер-әү, ик-әү, өс-әү. ун-ау*, хатта *өс-әү* һанында ирен гармонияһы ла һаҡланмай, йәғни *өс-өү* формаһы барлыҡҡа килә алмай. Ә алты, ике, ете һандарынан йыйнау һандары яһағанда уларҙың тамырындағы тар һуҙынҡылар алып ташлана (*алт-ы, ет-е*), улар киң һуҙынҡылар менән алмашына: *алт-ау, ет-әү*, сөнки тар һуҙынҡылар һаҡланһа, йыйнау һаны барлыҡҡа килә алмаҫ ине.

Шарт һөйкәлеше аффикстарының бөгөнгө тәбиғәтендә шулай ук билдәлелек-билдәһеҙлек категорияһының йоғонтоһо күренә, йәғни был

аффикстарҙың иренләшкән төрө барлыҡҡа килмәгән: *тотон-һа — көлдөр-һә, борол-һа — бөрөл-һә* һ.б. (көтөлгән *тотон-һо — көлдөр-һө, борол-һо — бөрөл-һө* формалары юҡ). Шарт ҡылымдар, исеменән күренеүенсә, иң билдәһеҙ эште белдерә, уларҙа фәҡәт эш-хәлдең эшләнеү-эшләнмәү шарты ғына хәбәр итеүләр, йәғни шарт ҡылым белдергән эш-хәлдең үтәлеү-үтәлмәүенә бер ниндәй ҙә ышаныс юҡ: *Атайымдар ҡайтһа, беҙ бик шатланыр инек.* Был турала, йәғни шарт ҡылымдарҙың билдәһеҙ эш-хәлде белдереүен проф. Ж.Ғ.Кейекбаев та һыҙыҡ өҫтөнә алған һәм "условная форма глагола выражает неопределенность", тип күрһәткән[9].

Мәҡәләнең аҙағында шундай һығымталар яһарға мөмкиндер: тел, ни тиклем тотороҡло булһа ла, һәр ваҡыт үҙгәрештә, үҫештә була. Телдә нәмәләр төшөп ҡала, юғала, уның урынына икенсе күренештәр барлыҡҡа килә. Әйтәйек, башҡорт телендә боронғо нигеҙ телдә — боронғо төрки телдә булмаған өндәр барлыҡҡа килгән: *h, ç, ҙ* өндәре. Грамматик аффикстарҙың да фонетик варианттары ла башҡорт телендә күберәк барлыҡҡа килгән — быны беҙ алдағы биттәрҙә күрҙек. Башҡорт теленә иң яҡын ҡәрҙәш тел һаналған татар телендә бындай аффикстарҙың варианттары аҙыраҡ. Ни өсөн? Сөнки һәр бер телдә бар ҡәрҙәш телдәргә хас булған закондар (нормалар) хәрәкәт итә, әммә һәр телдә шул ук закондарҙың таралыуы, хәрәкәт итеү кимәле бер төрлө булмаҫҡа мөмкин. Мәҫәлән, бөтә төрки телдәрҙә лә билдәлелек-билдәһеҙлек теорияһы (законы) бер төрлөрәк, бер кимәлдәрәк хәрәкәт итә, ә сингармонизм законының билдәләре (айырым төрҙәре) төрлө телдә төрлөсә хәрәкәт итә. Әйтәйек, ирен гармонияһы башҡорт телендә эҙмә-эҙлекле үткәрелә, ә татар телендә бындай эҙмә-эҙлелек юҡ: башҡортса — *тормошо*; татарса — *тормышы* (һәр хәлдә, орфографияһында).

Билдәлелек-билдәһеҙлек категорияһы менән сингармонизм законының башҡорт телендә эҙмә-эҙлерәк һәм даимираҡ үткәрелеүе бер үк аффикстың варианттары күп булыуға килтерә лә инде. Башҡорт телендәге аффикстар, уларҙың төрҙәре (варианттары) телдә йәшәгән билдәле закондар нигеҙендә барлыҡҡа килгән. Телдә барған үҙгәрештәр ҙә билдәле закондар нигеҙендә бара. Законһыҙ, йәғни ниндәйҙер осраҡлы сәбәптәр арҡаһында үҙгәрештәр булмай.

**Әҙәбиәт**


1 Киекбаев Дж.Г. Введение в урало-алтайское языкознание. Уфа, 1972. 108-се бит.
2 Киекбаев Дж.Г. Күрһәтелгән хеҙмәт. 96-сы бит.
3 Благова Г.Ф. Плеонастическое использование аффиксов в тюркских языках в историческом освещении // Вопросы языкознания. 1968. №6.
4 Киекбаев Дж.Г. Основы исторической грамматики урало-алтайских языков. Уфа, 1996. 171-се бит.
5 Киекбаев Дж.Г. Күрһәтелгән хеҙмәт. 171-се бит.
6 Махмутова Л.Т. Мензелинский говор // Материалы по татарской диалектологии. Казань, 1962. 67-се бит.
7 Киекбаев Дж.Г. Күрһәтелгән хеҙмәт. Уфа, 1996. 336-сы бит.
8 Киекбаев Дж.Г. Күрһәтелгән хеҙмәт. Уфа, 1996. 328-се бит.
9 Киекбаев Дж.Г. Введение в урало-алтайское языкознание. Уфа, 1972. 100-сө бит.